Ҡабул ителде:
*Дүртенсе педсоветта*
*протокол № 4 29 май 2020 йыл*

Раҫлайым:
Балалар баҡсаһы мөдире
вазифаһын башҡарыусы
_______________ Фәтхуллина З.Б.
Бойороҡ № “__” май 2020 йыл

**БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ СИБАЙ ҠАЛАҺЫ ҠАЛА ОКРУГЫНЫҢ “СУЛПЫЛАР” БЕРЛӘШТЕРЕЛГӘН БАЛАЛАР БАҠСАҺЫ МУНИЦИПАЛЬ МӘКТӘПКӘ ТИКЛЕМГЕ БЕЛЕМ БИРЕҮ БЮДЖЕТ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ**

# “СУЛПЫЛАР” БАЛАЛАР БАҠСАҺЫНДА 2019-2020 УҠЫУ ЙЫЛЫНА ЙӘЙГЕ ҺАУЫҠТЫРЫУ ЭШТӘРЕ

әҙерләне: өлкән тәрбиәсе
Бикбова С.Р.

**СИБАЙ – 2020**

**Маҡсат:**

Балалар баҡсаһында мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың һауыҡтырыу – сыныҡтырыу, танып – белеү эшмәкәрлеген ойоштороу өсөн һәм уларҙың физик, психик, ижади үҫешенә булышлыҡ иткән уңайлы шарттар булдырыу.

**Бурыстар:**

1. Балаларҙың һаулығын һәм тормош хәүефһеҙлеген һаҡлау буйынса шарттар булдырыу. Ауырыу кимәлен һәм травматизмды иҫкәртеү.

2. Балаларҙың һаулығын арттырыуға һәм физик үҫешен тәьмин итеүгә, әхлаки тәрбиә биреүгә, балаларҙың танып - белеү ҡыҙыҡһыныуҙарын һәм культура – гигиеник, хеҙмәт күнегеүҙәрен үҫтереүгә йүнәлтелгән эш системаһын тормошҡа ашырыу.

3. Балаларҙы туҡландырыуҙа витаминизация ҡулланыу һәм рационға йәшелсә - емештәр даими индереү.

4. Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың йәйге һауыҡтырыу эштәрен ойоштороу буйынса педагоготарҙың компетенцияһын күтәреү.

5. Балаларҙы йәйге һауыҡтырыу эштәрендә ата - әсәләргә педагогик аң – белем таратыу һәм санитар белемдәр таратыу эштәрендә тығыҙ хеҙмәттәшлек итеү.

## I. ЙӘЙГЕ ЭШ ПЛАНЫ ӘҘЕРЛӘҮ

| № | Эш йөкмәткеһе | Үтәү ваҡыты | Яуаплылар |
|---|---|---|---|
| | **Ойоштороу эштәре** | | |
| 1 | Йәйге эш планы буйынса бойороҡ әҙерләү | Май | Балалар баҡсаһы мөдире вазифаһын башҡарыусы Фәтхуллина З.Б. |
| 2 | Йәй көндәренә балаларҙың һаулығын һаҡлау буйынса инструктаж үткәреү | Май | Балалар баҡсаһы мөдире вазифаһын башҡарыусы Фәтхуллина З.Б. Хеҙмәт һаҡлау белгесе Бикбова С.Р. |
| 3 | Саф һауала уйындар ойоштороу өсөн кәрәкле материалдар әҙерләү | Май | Тәрбиәселәр |

| | | | |
|---|---|---|---|
| 4 | Төркөмдәрҙә уйын оборудованиеһын яңыртыу, дидактик уйындар, уйын зоналарын йәш үҙенсәлектәренә ярашлы булдырыу | Июнь<br>Июль<br>Август | |

**Административ – хужалыҡ эштәре**

| | | | |
|---|---|---|---|
| 1 | Балалар баҡсаһында косметик ремонт үткәреү | май – июнь айы | Хужалыҡ мөдире Көмөшбаева А.Т. |
| 2 | Кәрәкле инвентарҙарға, оборудованиеларға ревизия үткәреү | Май | Хужалыҡ мөдире Көмөшбаева А.Т. |
| 3 | Уйын майҙансыҡтарын йыйыштырырға һәм һыу ҡойорға эш ҡоралдары әҙерләү | Май | Хужалыҡ мөдире Көмөшбаева А.Т. |
| 4 | Баҡса эштәрен ойоштороу (йәшелсә, сәскә орлоҡтарын сәсеү, үсентеләрҙе түтәлдәргә ултыртыу) | Май –<br>Июнь | Хужалыҡ мөдире Көмөшбаева А.Т., өлкән тәрбиәсе Бикбова С.Р., тәрбиәселәр |
| 5 | Ҡом һауыттарын ҡом менән тултырыу. | Июнь | Тәрбиәселәр |
| 6 | Экологик өмәләр ойоштороу (балалар баҡсаһы биләмәһен йыйыштырыу):<br>- сүп-сарҙан таҙартыу;<br>- үлән сабыу;<br>- ҡыуаҡтарҙы ҡырҡыу;<br>- ҡоро ботаҡтарҙы алыу. | йәй буйына | Хужалыҡ мөдире Көмөшбаева А.Т. |
| 7 | Уйын майҙансыҡтарын төҙөкләндереү. | Июнь | Хужалыҡ мөдире Көмөшбаева А.Т., өлкән тәрбиәсе Бикбова С.Р, тәрбиәселәр |
| 8 | Балалар баҡсаһы территорияһында урынлашҡан “Юл хәрәкәтен өйрәнеү” майҙансығын яңыртыу, ағартыу эштәре. | 15 июнгә тиклем | Тәрбиәсе Ишморатова Н.Р. |

## II. ЙӘЙГЕ ҺАУЫҠТЫРЫУ ЭШТӘРЕ ЦИКЛОГРАММАҺЫ

| Эш формаһы | Ойоштороу шарттары | | | Яуаплылар |
|---|---|---|---|---|
| | Урыны | Ваҡыты | Оҙонлоғо, мин. | |
| **Иртәнге гимнастика** | Саф һауала | Көн һайын | Кескәйҙәр – 6<br>Уртансылар - 7<br>Өлкәндәр – 10<br>Мәктәпкә әҙерлек - 10 | Физик тәрбиә биреү инструкторы тәрбиәселәр |
| **Һүрәтләү эшмәкәрлеге буйынса ОББЭ** | Төркөмдә йәки уйын майҙансығында | Аҙнаһына 2 тапҡыр (һүрәт төшөрөү, йәбештереү/әүәләү) | Кескәйҙәр – 15<br>Уртансылар - 20<br>Өлкәндәр – 25<br>Мәктәпкә әҙерлек - 30 | Тәрбиәселәр |
| **Физик тәрбиә буйынса ОББЭ** | Саф һауала спорт майҙансығында | Аҙнаһына 3 тапҡыр | Кескәйҙәр – 15<br>Уртансылар - 20<br>Өлкәндәр – 25<br>Мәктәпкә әҙерлек - 30 | Физик тәрбиә биреү инструкторы тәрбиәселәр |
| **Хәрәкәтле уйындар** | Саф һауала спорт майҙансығында | Көн һайын | Бөтә төркөмдәр өсөн 10 – 20 | Тәрбиәселәр |
| **Сыныҡтырыу саралары** | Сыныҡтырыу төрөнә ҡарап | Планға ярашлы | | Тәрбиәселәр |
| **Режим барышында индивидуаль эштәр** | Физкультура залында йәки саф һауала | Индивидуаль рәүештә | Индивидуаль рәүештә | Тәрбиәселәр |

# III. ПЕДАГОГТАР МЕНӘН ЭШ

| № | Эш төрө | Яуаплылар | Үткәреү тураһында отметка |
|---|---|---|---|
| | **ИЮНЬ** | | |
| 1 | Консультация “Коронавирус ваҡытында йәйге һауыҡтырыу эштәре ойоштороу” | Өлкән тәрбиәсе | |
| 2 | Консультация “Сыныҡтырыу саралары” | Физик тәрбиә биреү инструкторы Йәнбәкова М.А. | |
| 3 | “Беренсе медицина ярҙамы күрһәтеү ҡағиҙәләре” | Шәфҡәт туташы Сәфәрғалина Г.Р. | |
| | **ИЮЛЬ** | | |
| 1 | “Йәйге осорҙа балаларҙың травматизмын иҫкәртеү” | Тәрбиәсе Малабаева Н.З. | |
| 2 | Консультация “Йәй көндәрендә тәжрибәләр ойоштороу” | Тәрбиәсе Сабитова А.Ф. | |
| 3 | Консультация “Йәйгеһен мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы тәбиғәт менән таныштырыу” | Тәрбиәсе Үҙәнбаева А.З. | |
| | **АВГУСТ** | | |
| 1 | “Балаларҙың ағыулы үҫемлектәр һәм бәшмәктәр менән ағыуланыуҙарын иҫкәртеү” | Тәрбиәсе Ишморатова Н.Р. | |
| 2 | Фотоотчет – презентация “Эх, күңелле йәй үтте!” | Бөтә төркөм тәрбиәселәре | |

# IV. БАЛАЛАР МЕНӘН ЭШ.
# ЙӘЙ КӨНДӘРЕНӘ КОМПЛЕКСЛЫ – ТЕМАТИК ПЛАН.

| ИЮНЬ | | | | |
|---|---|---|---|---|
| **Аҙналар** | **Аҙна көндәре** | **Темалар** | **Эш йөкмәткеһе** | **Йомғаҡлау сараһы, яуаплы** |
| I аҙна Бала кешеләр донъяһын да | дүшәмбе 01.06. | “Балаларҙы яҡлау көнө” | Әңгәмәләр “Бөтә донъя балалар көнө”, “Йәй миҙгеле”, иллюстрациялар ҡарау “Бала хоҡуҡтары”, баласаҡ тураһында йырҙар тыңлау, интервью “Минең хыялым” | Асфальтта һүрәт төшөрөү “Һәр ваҡыт булһын тыныслыҡ!” тәрбиәселәр |
| | шишәмбе 02.06. | “Балалар баҡсаһы” | Әңгәмәләр “Минең яратҡан баҡсам”, “Балалар баҡсаһында ниндәй һөнәр эйәләре эшләй?”, уйын өсөн атрибуттар эшләү, балалар баҡсаһының эмблемаһын һүрәтләү, хәрәкәтле уйын “Һәпәләк”, һикергестәр менән уйындар, сюжетлы – ролле уйын “Балалар баҡсаһы”, түңәрәк уйындары. | Балалар баҡсаһы буйлап онлайн экскурсия тәрбиәселәр |
| | шаршамбы 03.06. | “Йәшел, һары, ҡыҙыл ут!” | Әңгәмә “Светофор ҡасан барлыҡҡа килгән”, конкурс “Юл билдәләре”, викторина “Светофор – беҙҙең дуҫ”, юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен сағылдырыусы дидактик, сюжетлы – ролле уйын уйнау, йәнһүрәттәр ҡарау, һүрәтләү эшмәкәрлеге. | Һүрәттәр күргәҙмәһе “Йәшел, һары, ҡыҙыл ут” тәрбиәселәр |
| | кесаҙна 04.06. | “Буласаҡ спортсмендар” | Темаға ярашлы альбомдар ҡарау, әңгәмә “Спорт һаулыҡты нығыта”, туп, кольцеброс менән уйындар, бармаҡ уйындары. | Тәрбиәселәр |
| | йома | “5 июнь - Бөтә донъя тирә | Әңгәмә “Һыуһыҙ йәшәү буламы?”, | Экоквест |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | 05.06. | – йүнде һаҡлау көнө” | “Тәбиғәтте һаҡлайыҡ”, һыу, һауа менән тәжрибәләр, уйын – сәйәхәт “Һыу ҡайҙа йәшенә?”, үҫтереүсе уйындар, викторина. | “Тамсыҡай мажаралары” тәрбиәсе Ҡәйепҡолова З.Г. |
| | | Рәсәйҙә А.С. Пушкин көнө | А.С. Пушкиндың әҫәрҙәрен уҡыу, аудиояҙмалар тыңлау, иллюстрациялар ҡарау, сюжетлы – ролле уйын “Библиотека”, һүрәттәр конкурсы “Минең яратҡан әкиәтем” | Тәрбиәселәр |
| II аҙна Рәсәй көнө | дүшәмбе 08.06. | “Һаулыҡ көнө” | Әңгәмә “Һау – сәләмәт булайыҡ”, “Хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре”, балалар баҡсаһының шәфҡәт туташы менән осрашыу,  сюжетлы – ролле уйындар “Дауахана”, “Дарыухана”, майҙансыҡта үләндәрҙе күҙәтеү. | Тәрбиәселәр |
| | шишәмбе 09.06. | Дуҫтар көнө | Әңгәмә “Минең дуҫым”, “Ни өсөн безгә дуҫтар кәрәк?”, хәрәкәтле уйындар “Баҫтырыш”, “Бесәй, сысҡан”, дидактик уйын “Нимә яҡшы, нимә насар?”, туп менән уйындар, “Дуҫымдың портреты” һүрәт төшөрөү, акция “Йылмайыу бүләк ит!” | Тәрбиәселәр |
| | шаршамбы, кесаҙна 10-11.06. | Рәсәй көнө | Әңгәмәләр “Минең Ватаным – Рәсәй”, “Рәсәйҙең дәүләт билдәре”, Мәскәү ҡалаһы тураһында фотоиллюстрациялар, альбомдар ҡарау, йырҙар тыңлау, , нәфис әҙәбиәт уҡыу, хәрәкәтле уйындар “Кем тиҙерәк”, “Флагты тапшыр”, төрлө халыҡ уйындарын уйнау. | Флешмоб ойоштороу |
| III аҙна | дүшәмбе 15.06. | Сәскәләр батшалығында | Түтәлдәге сәскәләрҙе күҙәтеү, әңгәмә “Бүлмә гөлдәре”, иллюстациялар ҡарау, нәфис әҙәбиәт уҡыу, йырҙар өйрәнеү, | Тәрбиәселәр |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | | | майҙансыҡта түтәлдәге сәскәләрҙе тәрбиәләү, дидактик уйын “Мин биш сәскә беләм”, “Баҡсала ниндәй эш ҡоралы кәрәк?”, асфальтта һүрәт төшөрөү, эшләпәләр дифелеһы. | |
| | шишәмбе 16.06. | Ҡыҙыл төҫтәр көнө | Ҡыҙыл төҫлө кейемдә кейенеп килеү, ҡыҙыл төҫлө флагтар менән гимнастика эшләү, һүрәт төшөрөү, әүәләү, йәбештереү. | “Ҡыҙыл төҫлө әйберҙәр” күргәҙмәһе тәрбиәсе Үҙәнбаева А.З. |
| | шаршамбы 17.06. | Милли байрамдар. Һабантуй байрамы менән танышыу. | Балаларҙы һабантуй байрамы менән таныштырыу, байрам тураһында видеофильмдар ҡарау, башҡорт халыҡ уйындары уйнау. | Тәрбиәселәр |
| | кесаҙна 18.06. | Бәләкәй леди һәм джентельмендар | Әңгәмәләр “Итәғәтлек ҡағиҙәләре”, “Мин нисек өлкәндәргә ярҙам итәм, “Минең яҡшы эштәрем”, сюжетлы һүрәттәр ҡарау “Яҡшы – насар”, нәфис әҙәбиәт укыу, дидактик уйындар “Яғымлы һүҙ әйт”, “Тылсымлы һүҙҙәр”, сюжетлы – ролле уйындар “Супермаркет”, “Бөҙрәхана” | Тәрбиәселәр |
| | йома 19.06. | Футболистар көнө | Футбол, чемпиондар тураһында әңгәмә ҡороу, презентация “Шундай төрлө туптар”, туп менән уйындар. | Футбол буйынса мини - чемпионат ойоштороу |
| IV аҙна Хәүеф һеҙлек аҙнаһы | дүшәмбе 22.06. | Балалар хоҡуктары | Әңгәмә “Минең хоҡуҡтарым”, “Исемем нимәне аңлата”, проблемалы ситуациялар сисеү. | Тәрбиәселәр |
| | шишәмбе 23.06. | Йәйге ҡағиҙәләр | “Ҡояш, һауа һәм һыу – беҙҙең кәрәкле дуҫтар”, “Ҡояшта ҡыҙыныу ҡағиҙәләре”, “Һыуҙа йөҙөү ҡағиҙәләре”, темаға ярашлы | Тәрбиәселәр |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | | | йомаҡтар сисеү. | |
| | шаршамбы 24.06 | Янғын хәүефһеҙлеге | Әңгәмә “Янғын сығыу сәбәптәре”, “Янғын ҡурҡынысы”, “Янғын ваҡытында үҙ – үҙеңде тотоу ҡағиҙәләре”,  мәкәлдәр өйрәнеү, дидактик һәм сюжетлы – ролле уйындар. | Тәрбиәселәр |
| | кесаҙна 25.06. | Юл йөрөү әлифбаһы | Дидактик уйындар “Юл билдәләре”, “Билдәне тап”, “Ҡырҡылған һүрәт”, йәбештереү, әүәләү, һүрәтләү, сюжетлы һүрәт буйынса әңгәмәләшеү, конструкторлау эшмәкәрлеге, төҫһөҙ буямдарҙы буяу, йәнһүрәттәр ҡарау. | Тәрбиәселәр |
| | йома 26.06. | “Һаулыҡ көнө” | Әңгәмә “Һау – сәләмәт булайыҡ”, “Шәхси гигиена”, “Коронавирус сире”, “Хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре”, сюжетлы – ролле уйындар “Дауахана”, “Дарыухана”, майҙансыҡта дарыу үләндәрен күҙәтеү. | Тәрбиәселәр |
| IV аҙна | дүшәмбе 29.06. | “Шәхси хәүефһеҙлек” | Әңгәмә “Әгәр, мин өйҙә яңғыҙ ҡалһам”, “Әгәр, мин урамда юғалһам” “Хәүефле әйберҙәр”, “Сит кеше”, “Һыу инеү ҡағиҙәләре”, иллюстрациялар ҡарау, төрлө ситуациялар сисеү, дидактик уйындар. | Тәрбиәселәр |
| | шишәмбе 30.06. | “Тәбиғәт ҡосағында” | Әңгәмә “Урманда үҙ-үҙеңде тотоу ҡағиҙәләре”, “Хәүефле бөжәктәр”, “Ағыулы үләндәр”, “Йәшен ҡурҡынысы”, йомаҡтар сисеү. | Тәрбиәселәр |
| **ИЮЛЬ** | | | | |
| I аҙна Хайуан дар | 01.07. шаршамбы | Хайуандар донъяһы | Хайуандар тураһында әңгәмәләр үткәреү, йомаҡтар ҡойоу, хикәйәләр укыу, хәрәкәтле һәм дидактик уйындар. | Тәрбиәселәр |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| донъяһы | кесаҙна 02.07. | Ҡоштар көнө | “Беҙҙең яҡ ҡоштары” исемле альбомдар ҡарау, ҡоштарҙы күҙәтеү, ҡул эше “Ҡоштар” (оригами.) | Тәрбиәселәр |
| | йома 03.07. | Балыҡсылар көнө | “Диңгеҙ буйлап” – виртуаль экскурсия. | Тәрбиәселәр |
| II аҙна | дүшәмбе 04.07. | Зоопарк көнө | Трафареттар ярҙамында “Африка хайуандары” һүрәтен эшләү, хайуандар булып күнекмәләр, хәрәкәттәр эшләү. | Тәрбиәселәр |
| | шишәмбе 05.07. | Джунгли саҡыра | Хайуандар тураһында әңгәмәләр үткәреү, йылы яҡ хайуандары тураһында ҡыҙыҡлы факттар, йомаҡтар ҡойоу, хикәйәләр уҡыу, хәрәкәтле һәм дидактик уйындар. | Тәрбиәселәр |
| | шаршамбы 08.07. | 8 июль - Ғаилә, мөхәббәт һәм тоғролоҡ көнө. | Ғаилә фотоларын ҡарау, әңгәмәләр “Минең ғаиләм”, “Беҙҙең ял көндәребеҙ”, “Минең өләсәйем”, “Атайымдың һөнәре”, “Бәләкәй туғаныма бүләк”, ҡоролмалар ҡороу “Беҙҙең өй” | Һүрәтләү эшмәкәрлеге “Минең ғаиләм шәжәрәһе” |
| | кесаҙна 09.07. | Күңелле математика | Математик үҫтереүсе, дидактик уйындар. | Тәрбиәселәр |
| | йома 10.07. | Тәжрибәләр үткәреү көнө | Майҙансыҡта һыу, ҡом менән тәжрибәләр үткәреү, һабын ҡыуыҡтары менән уйындар. | Тәрбиәселәр |
| III аҙна Халыҡ уйын дары | дүшәмбе 13.07. | Башҡорт халыҡ уйындары көнө | Хәрәкәтле, түңәрәк уйындары уйнау, фольклор, йолалар менән танышыу. | Тәрбиәселәр |
| | шишәмбе 14.07. | Рус халыҡ уйындары көнө | Милли халыҡ уйындары “Горелки”, “Два Мороза”, “Гуси – гуси”, фольклор, йолалар менән танышыу, “Дымков уйынсыҡтары”, әүрәткестәр, һамаҡтар өйрәнеү, бармаҡ уйындары. | Тәрбиәселәр |
| | шаршамбы 15.07. | Татар халыҡ уйындары көнө | Милли халыҡ уйындары “Түбәтәй”, “Тимербай”,”Йөҙөк һалыш”, фольклор, | Тәрбиәселәр |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | | | йолалар менән танышыу, түңәрәк уйындары. | |
| | кесаҙна 16.07. | Немец халыҡ уйындары | Милли халыҡ уйындары “Йәрминкә”, “Тейенкәй”, “Янғын”, фольклор, йолалар менән танышыу. | Тәрбиәселәр |
| | йома 17.07 | Минең яратҡан уйындарым | Өҫтәл – баҫма, шашка, шахмат уйындары, балаларҙың теләктәре буйынса уйындар. | “Шашка буйынса мини батл” |
| IV аҙна Театр аҙналығы | дүшәмбе 20.07. | Театр аҙналығы | Йәш үҙенсәлектәренә ярашлы әңгәмәләр “Театр тураһында мин нимә беләм?”, “Театрҙың барлыҡҡа килеү тарихы”, “Спектакль ваҡытында үҙ – үҙеңде тотоу ҡағиҙәләре”, продуктив эшмәкәрлек “Ҡағыҙҙан бармаҡ театры эшләү”, әкиәт буйынса әүәләү, уйын – ситуациялар булдырыу, театрлаштырылған уйындар, китаптар күргәҙмәһе. | кескәйҙәр төркөмө балалары өсөн онлайн рәүештә “Шалҡан” әкиәтен сәхнәләштереү |
| | шишәмбе 21.07. | | | |
| | шаршамбы 22.07. | | | |
| | кесаҙна 23.07. | | | |
| | йома 24.07. | | | |
| V аҙна | дүшәмбе 27.07 | Шифалы үҫемлектәр | “Һаҡ бул, үҫемлектәр!”, “Дарыу үләндәре”, “Ағыулы бәшмәктәр” темаһына иллюстрациялар ҡарау, сюжетлы һүрәттәр ҡарау, проблемалы ситуациялар сисеү, “Хәүефле” - билдәләр эшләү, үҫемлектәр тураһында йомаҡтар ҡойоу. | Тәрбиәселәр |
| | шишәмбе 28.07. | Бөжәктәр көнө | Экологик һуҡмаҡ буйлап сәйәхәт, уйын - әңгәмә “Ҡырмыҫҡа иләүе”, көн темаһына ярашлы продуктив эшмәкәрлек, карточкалар ҡарау. | Тәрбиәселәр |
| | шаршамбы 29.07. | “Минең яратҡан уйынсығым” | Әңгәмә “Уйынсыҡтар тарихы”, “Минең уйынсығым”, ташландыҡ материалдан | Тәрбиәселәр |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | | | уйынсыҡ эшләү, түңәрәк уйыны “Беҙ күңелле балалар”, дидактик уйындар “Дүртенсе артыҡ”, “Яғымлы һүҙ” | |
| | кесаҙна 30.07. | Оҫта ҡулдар | ташландыҡ материалдан ҡул эштәре ойоштороу, ата - әсәләргә бүләк итеү | Тәрбиәселәр |
| | йома 31.07. | Витаминдар көнө | Йәшелсә-емештәр, уларҙың файҙаһы тураһында әңгәмә, дидактик уйын “Тылсымлы моҡсай”, тәбиғәттә хеҙмәт, бутҡаны варенье йәки мармелад киҫәктәре менән биҙәү, югереү һәм һикереүгә күнегеүҙәр. | Тәрбиәселәр |
| **АВГУСТ** | | | | |
| I аҙна Сәйәхәт аҙналығы | дүшәмбе 03.08. | Йыһан киңлегендә | Һүрәтләү эшмәкәрлеге “Йыһан”, “Ракета”, “Серле йондоҙҙар”, викторина “Йыһан белгесе”. | Тәрбиәселәр |
| | шишәмбе 04.08. | Тәбиғәт донъяһында | Башҡортостандың флораһын һәм фаунаһын өйрәнеү, темаға ярашлы һүрәттәр ҡарау. | Тәрбиәселәр |
| | шаршамбы 05.08. | Диңгеҙ буйлап сәйәхәт | Һыу менән тәжрибәләр үткәреү “Һыуҙы төрлө төҫтәргә буяу”, диңгеҙ тауышын тыңлау, уйын – сәйәхәт “Диңгеҙ төбө”, сюжетлы – ролле уйын “Һыу батшалығында ҡунаҡта” | Тәрбиәселәр |
| | кесаҙна 06.08. | Үткән быуаттар буйлап сәйәхәт | Дидактик уйын “Элек һәм хәҙер”, “Нимә башта, нимә аҙаҡ”, “Археологтар” уйыны, ғәҙәти булмаған техника ысулдары менән һүрәт төшөрөү. | Тәрбиәселәр |
| | йома 07.08. | Музыка иленә сәйәхәт | Йәй тураһында йырҙар тыңлау, башҡорт балалар композиторҙары, музыка ҡоралдары менән танышыу, йырлы – бейеүле түңәрәк уйындар, музыкаль дидактик уйындар, | Тәрбиәселәр |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | | | ҡомда һүрәт төшөрөү. | |
| II аҙна Спорт аҙналығы | 10.08.<br>11.08.<br>12.08.<br>13.08.<br>14.08. | Физкультурниктар көнө | “Физкультура менән дуҫбыҙ” ата - әсәләр менән берлектә иртәнге гимнастика эшләү, сыныҡтырыу саралары, әңгәмә “Зарядканың файҙаһы”, “Ни өсөн хәрәкәт итергә кәрәк?”, “Таҙалыҡ һәм һаулыҡ”, хәрәкәтле уйындар “Кем мәргән?”, “Сәпкә тей”, альбом ҡарау “Йәйге спорт төрҙәре”, “Спорт ҡоралдары”. | Тәрбиәселәр |
| III аҙна Минең Ватаным | дүшәмбе 17.08. | Башҡортостан – Гөлбостан! | Тыуған ил тураһында нәфис әҙәбиәт уҡыу, шиғырҙар өйрәнеү, мәҡәлдәр, әйтемдәр әйрәнеү. Башҡортостандағы арҙаҡлы балалар яҙыусыһы менән танышыу. Башҡортостан картаһы менән эш. Энциклопедиялар ҡарау. Иллюстрациялар, фотоһүрәттәр , открыткалар ҡарау. Тыуған ил тураһында йырҙар өйрәнеү, уйындар уйнау. Яҙыусыларҙың портреттарын ҡарау.Тыуған ил тураһында мәҡәлдәр өйрәнеү | Тәрбиәселәр |
| | шишәмбе 18.08. | Өфө - баш ҡала | Өфө ҡалаһының күренештәре төшөрөлгән фотолар ҡарау, Салауат Юлаев һәйкәле, “Ете ҡыҙ” фонтаны тураһында әңгәмә, легендалар, йырҙар, шиғырҙар тыңлау. | Тәрбиәселәр |
| | шаршамбы 19.08. | Сибайым – тыуған ҡалам! | Ҡала гербын, арҙаҡлы шәхестәрҙең портреттарын ҡарау, ҡаланың иҫтәлекле урындарына экскурсия ойоштороу, ҡоролмалар ҡороу “Ҡала урамдары”, ҡала макетын төҙөү, сюжетлы – ролле уйындар “Ғаилә”, “Балалар баҡсаһы”. | Тәрбиәселәр |
| | кесаҙна | Беҙ дуҫ йәшәйбеҙ. | Дидактик уйындар “Минең ғаиләм”, | Тәрбиәселәр |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | 20.08. | | “Минең дуҫтарым”, “Был нимәнең өлөшө”, “Тәбғәттә үҙ – үҙеңде тотоу”, “Һөйләү буйынса таны” һ.б. Сюжетлы – ролле уйындар “Минең ғаиләм, “Беҙгә ҡунаҡтар килде”, “Автобус”, “Тыуған көн” һ.б. | |
| | йома 21.08. | Рәсәй флагы көнө | Әңгәмә “Аҡ,күк, ҡыҙыл”, “Рәсәй флагы”, Рәсәй тураһында шиғырҙар өйрәнеү, йырҙар тыңлау, дидактик уйын “Флагты йый”, “Рәсәй флагын тап”, картиналар ҡарау, йәбештереү “Рәсәй флагы” | Тәрбиәселәр |
| IV аҙна Һау бул, йәмле йәй! | 24.08 – 31.08. | Йәй үтте! | Хәрәкәтле уйындар. Әңгәмәләр. Нәфис әҙәбиәт уҡыу. Шиғырҙар ятлау. Дидактик уйындар “Был ҡайсаҡ була?”, “Нимә үҙгәрҙе”, “Рәссәм нимә эшләп бөтөрмәгән”, “Дауам ит”, “Һүрәткә ҡарап һөйлә” | Тәрбиәселәр |

# V. АТА-ӘСӘЛӘР МЕНӘН ЭШ

| № | Эш төрө | Яуаплылар | Үткәреү тураһында отметка |
|---|---|---|---|
| | **ИЮНЬ** | | |
| 1 | “Йәй айына көн режимы” | Тәрбиәселәр | |
| 2 | Консультация “Талпандан һаҡ булығыҙ!” | Тәрбиәселәр | |
| 3 | Юл хәрәкәте ҡағиҙәләре буйынса консультациялар, буклеттар әҙерләү | Тәрбиәселәр | |
| 4 | “Бала һәм тәбиғәт” – экологик тәрбиә биреү буйынса кәңәштәр | Тәрбиәселәр | |
| 5 | Папка – йәймә “Йәйгеһен нисек туҡланырға?” | Тәрбиәселәр | |
| | **ИЮЛЬ** | | |
| 1 | Консультация “Башҡа эҫе үтеү” | Тәрбиәселәр | |
| 2 | “Беҙҙең татыу ғаилә” һүрәттәр күргәҙмәһе (8 июль – бөтә Рәсәй ғаилә һәм мөхәббәт көнөнә арналған күргәҙмә) | Тәрбиәселәр | |
| 3 | Мәғлүмәт әҙерләү “Һыу һәм ҡом менән уйындар” | Тәрбиәселәр | |
| | **АВГУСТ** | | |
| 1 | “Адаптация тураһында төшөнсә” – яңы килгән балаларҙың ата-әсәләренә тәкдимдәр | Тәрбиәселәр | |
| 2 | “Эх, күңелле йәй үтте!” – төркөмдәргә плакаттар, папка – йәймәләр әҙерләү | Тәрбиәселәр | |

# <u>ИҪКӘРТМӘ</u>

Аҙна темаларына ярашлы һәр төркөмдә **<u>атап әйтелгән темаларға ярашлы</u>** саф һауала төрлө саралар планлаштырырға:

**Социаль – коммуникатив өлкә буйынса эшмәкәрлектәр:**

- әңгәмәләр, һөйләшеү, уйын – ситуация, уйын – сәйәхәт, иллюстрациялар. картиналар, фотолар ҡарау, йомаҡтар ҡойоу, хикәйәләр төҙөү, ситуатив һөйләшеү, баҡсала һәм сәскә түтәлдәрендә хеҙмәт эшмәкәрлеге, дидактик һәм сюжетлы-ролле уйындар, режиссер уйындары, уйын – сәхнәләштереү.

**Танып – белеү өлкәһе буйынса эшмәкәрлектәр:**

- ҡарау, күҙәтеү – тикшеренеү эше, тәжрибә үткәреү, ижади эштәр, проблемалы ситуациялар сисеү, проект эштәре, интерактив – сәйәхәт, экологик викторина, тематик күргәҙмәләр, дидактик һәм үҫтереүсе уйындар, гербарий әҙерләү.

**Телмәр үҫтереү өлкәһе буйынса эшмәкәрлектәр:**

- ситуатив һөйләшеү, әңгәмәләр, һөйләшеү, нәфис әҙәбиәт уҡыу, шиғырҙар,телтөҙәйткес, тиҙәйткестәр, һамаҡтар өйрәнеү, йомаҡтар уйлап сисеү, бәләкәй күләмле хикәйәләр төҙөү.

**Художестволы – эстетик үҫеш өлкәһе буйынса эшмәкәрлектәр:**

- һүрәт төшөрөү, ҡорамалар йәбештереү, әүәләү, конструкторлау эшмәкәрлеге, театрлаштырылған уйындар, йырлау, музыка тыңлау.

**Физик үҫеш өлкәһе буйынса эшмәкәрлектәр:**

- иртәнге гимнастика, сыныҡтырыу саралары, музыкаль – ритмик хәрәкәттәр, күнегеүҙәр, хәрәкәтле уйындар, уйын – ярыштар, спорт уйындары, спорт элементтары менән уйындар, төрлө халыҡ уйындары, түңәрәк уйындары,ОББЭ.